# Иәтим кыҙ меҫкен

## Хәтирә

Хәтирә Туйыш ауылының йәтим кыҙы була. Байҙа йәрәй. Карабармак исемле шул ауылдың егетен ярата.

Икеһе лә улар тәҫкә һылыу, эшкә уңған булалар. Егет гел генә кайыш югән, шлейәләр үреп, ыҫмалаға кулы, бармактары карайып йөрөгән. Шуға уны бәләкәй сакта ук Карабармак тип йөрәтәләр. Хәтирә менән Карабармак бер береһен ни тиклем нык яратышып, бергә тормош корорға вәғәҙәләшеп йөрәһәләр ҙә, Хәтирәне икенсе йыр якка бер карт муллаға көсләк менән кейәүгә биреп ебәрәләр. "Иәтим кыҙ меҫкен Хәтирә" көйө шул фажиғаға карата Хәтирәнең үҙе сығарған көйө тип һөйләйҙәр. Был көйҙө Карабармак көйө тип йөрәтәләр. "Иәтим кыҙ меҫкен Хәтирә" Әбйәлил районында нык таралған көй.

Йырлағанда "Иәтим кыҙ меҫкен Хәтирә" тип беренсе, өсөнсө юлдарҙан һуң һәр сак кабатланып килә.

Тәүге өс йыр Туйыш ауылында йәшәүсе колхозсы Хәмит Нәсибуллиндең, ә калған дүрт йыр Рәхмәт ауылында йәшәүсе Зөләйхә Малбай кыҙы Кашафетдинованан /1904 йылғы/ яҙып алынды.

11-13 аугус, 1952 йыл.

1.

Кыҙыл ғына буйы әй өс муйыл,
Берәүкәйен йыкһам куш калыр;
Вәғәҙәләр биреп, кул тотошоп,
Карабармак йәрәп буш калыр.

Шыршы ла ағас әй бүрәнә
Саналарға һалһам һәйрәлә;
Үпмәйһең дә бит тип үпкәләйһең,
Үп һәм ауыҙым яман өйрәнә.

Аласабыр тигән ал өйрәк
Ағып кына бара боҙ буйлап;
Башкынаһын тарап, сәсмәү үреп,
Хәтирә сыға һылыу кыҙ булып.

П.

Иәтим кыҙ меҫкен Хәтирәкәй,
Бигерәк тә йәмде был тирә;
Иәтим кыҙ меҫкен Хәтирәне
Уй-хәсрәттәре бөтәрә.

Эскенәйем боша, тәкәт тә юк,
Ял да тапмай йөрәгем ярһыуы;
Хәтирәкәй сыкты яланға-
Ел була икән хәсерәт дарыуы.

Иәшел генә һандык өҫтәрендә
Хәтирәнең һәйгән катаһы ;
Ун ике лә йылға каторгаға
Китеп үлгән икән атаһы.

Алыҫтан да карап әй күренә
Яйык һыуҙың яйпы кисеүе;
Иән биреүҙәренә миҫал булды
Атайымдың сығып китеүе.

---